6 декабрь 2013 йыл

# ЙӘЙҒОР



№ 15 (38)

Касим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты гәзите



**Уважаемые женщины-матери!**

Искренне поздравляю вас с замечательным праздником душевного тепла и заботы – российским Днем матери!

Великая тайна материнства – в любви и мудрости, в милосердии и долготерпении. Самый родной, самый главный человек для любого из нас – это мама. Безграничная материнская любовь окружает людей с момента рождения, стремится защитить нас от невзгод, помогает преодолевать препятствия на жизненном пути.

**Дорогие матери!**

За любовь и терпение, за каждодневный труд и ласку, за поддержку и умение прощать! От всего сердца искренне желаю вам и вашим семьям счастья, крепкого здоровья, добра и благополучия!

***С уважением директор РХГИ***
***Садыкова Гулемеш Хайрулловна***

## Моя - мама!

Я очень люблю мою маму. Она у меня как лучик света в ненастный день, потому что может приободрить меня своими ласковыми словами. А её добрый, искренне любящий взгляд и нежный голос, у меня всегда в сердце, где бы я не находилась. И поэтому когда маме плохо, плохо и мне.

Мне всегда очень тяжело переносить разлуку с мамой: даже если это ненадолго, поэтому я всегда хочу находиться рядом с мамочкой.

Мамочка!Люблю тебя больше всего на свете! Прости меня, что порой бываю непослушной. Я знаю, что ты любишь меня и не послушную. Спасибо говорю за то, что ты есть у меня! Моя - Мама!

***Алсу Мухамадиева,***
***ученица 7В класса***



## Сәхнә артындағы бер “күренеш”

Театрға барғанда беҙҙең бар иғтибарҙы артистар ала, ә ҡалған бар нәмә фон кеүек күренә. Әммә костюмдар, декорациялар, реквизиттар, төрлө бутафор әйберҙәр спектаклдә ҡабул итеүҙә, уны аңлауҙа ҙур роль уйнай. Сәхнәгә улар әҙер килеш ҡайҙан килеүен, кем теккәнен белер өсөн, беҙ “Мираҫ” драма коллективы Ҡәҙриә Хәмит ҡыҙы етәкселегендә 27 ноябрҙә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына барып ҡайттыҡ. Театрға килеп ингәс тә беҙҙе актерҙар труппалары мөдире Зәлиә Фуат ҡыҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршы алды. Ул беҙҙе театрҙың “лабиринттары” буйлап алып йөрөнө. Декорациялар, бутафор, костюмдар тегеү һәм уларҙы һаҡлау цехтарын күреп ҡайттыҡ. Бай мәғлүмәттәр йыйып өлгөргән музейҙа булдыҡ, матур “Ҡышҡы баҡсаның” матурлығын күреп һоҡландыҡ. Беҙҙе Башҡортостандың халыҡ артисы Мәғәфүр Усманов үҙенең гримм бүлмәһенә саҡырып алды, унда актерҙың спектаклгә нисек әҙерләнгәнен күрҙек. Әйткәндәй, беҙ ҡараған, Александр Вампиловтың пьесаһы буйынса ҡуйылған “Өлкән ул”спектакле Мәғәфүр Усмановтың юбилейына арналған бенефис спектакле ине. Беҙҙе, буласаҡ рәссамдарҙы, сәхнәнең биҙәлеше, режиссерҙың үткер сәхнә алымдары (йәмһеҙ тормоштоң емерелеүе, кешелектең йәшәйеше яҡтыра барыуы) тетрәндерҙе. Автор һәм режиссер беҙгә – балаларға ғына түгел, өлкәндәргә лә, иртәгәһе көнөндә уйла, тип өндәште. Был өндәшеү һәр тамашасының күңеленә еткәндер тип ышанғы килә.

Беҙ ҙур рәхмәтебеҙҙе Ғәзизова Ҡәҙриә Хәмит ҡыҙына һәм театр эшмәкәрҙәренә еткерәбеҙ.

***Айзилә Мөлөкова,***
***10А класс уҡыусыһы***

# Шиғриәткә тәүге аҙымдар

*Нәркәс Баһаутдинова ижад иткән шиғырҙар*

**Ҡояш кеүек әсәйем**
Ҡояш кеүек алсаҡ йөҙлө
Көлә минең әсәйем.
Иртән тороп,эшкә китһә
Тик уңыштар теләйем.
Йоҡларга ятҡан сағында
Әсәйем әкиәт һөйләй.
Болотло көн булғанда ла
Әсәйем бер ҙә көймәй;
Сөнки әсәйем - ҡояштай,
Йылы нур һибә миңә,
‘’Бәпесем” тип һөйгән саҡта
Дөп-дөп тибә йөрәгем.
Әсәйем өйҙән сыҡҡанда,
Ҡояш бата тиерһең,
Әсәйем өйгә ингәндә,
Ҡояш ҡалка тиерһең!

**Өләсәйемә шиғыр**
Өләсәйем,ҡәҙерлем
Һине һағынып бөттөм.
Һәр кис һайын илайым,
Һине генә уйлайым.
Өйгә ҡайтып төшһәм мин
Һин ултыраһың көтөп;
Йылы бәлештәр әҙерләп,
Тәмле аштар бешереп .
Ҡулдарың һелтәй –һелтәй
Өләсәй оҙатып ҡала;
Кире китһәм ҡалаға
Күҙҙәренән йәш тама…
Йәйге ялдар еткән саҡта
Мин талпынам өйөмә,
Һағындым өләсәйҙе,
Ул яһаған тәмле сәйҙе.
Бәләкәй саҡтарымдан
Һин ҡараның бит мине,
Уйлайым һине генә
Мин яратам тик һине!

**Тыныс йоҡо**
Тыныс йоҡо теләйем һиңә
Йондоҙҙар инһен төшөңә,
Серле әкиәт илендә
Ай нурҙары яуһын үҙеңә.
Аҡбуҙатҡа ултырып
Осоп кит һин һауаға,
Наҙлы бишек йырҙары
Таралһын бар доньяға!

**Әсәйем доға ҡыла**
Һәр йома һайын әсәй
Тауға мәсеткә йөрөй.
Доға ҡылырға бара,
Бергә ала һөтлө сәй.
“Йома кұстөнәсе ” тип
Ҡоймаҡ һалып ебәрә,
Тау башына менәбеҙ
Һәр йома һайын бергә.
Барып еткәс беҙ унда
Саҙаҡалар бирәбеҙ,
Хәҙрәт уҡыған саҡта
Аяттарҙы тыңлайбыҙ.
Ҡөрьән китабын асып
Тиҫбеләрҙе тартабыҙ,
Доға ҡылған саҡтарҙа
“Бисмилланы”ҡабатлап.
Әсәйем менән бергә
Мин дә йөрөйөм тауға,
Ергә иман таралһын ,тип
Мин теләйем доғала!

**Ҡайтҡым килә өйөмә**
Тәҙрә төбөндә гөл һымаҡ
Ултырам илап-илап,
Ҡайтҡым килә өйгә, тип
Күңелһеҙ йырҙар уйлап.
Ямғыр ҙа минең менән
Ҡушылып илай - илай
Ә ҡояш, ҡайҙа һуң ул,
Ә ҡояш нимә уйлай?
Коштар сирҡылдашалар,
Уларга куңелле гел.
Осоп кайтып етәләр
Өйҙәренә һуң түгел!
Ҡайтҡым килә минең өйгә,
Белмәйем ни эшләргә,
Йәштәрем ағып төшә
Шиғырҙар дәфтәремә…
Ямғырҙар яуып тымды,
Илап күҙҙәр ҡыҙарҙы,
Барыбер ҡайтҡым килә
Минең тыуған өйөмә!

**Хәйерле иртә!**
Хәйерле иртә донья,тип
Һайрап ебәрһен ҡоштар!
Ҡояш балҡып ебәргәндә
Күңелле булһын тышта!

**Әсәйем минең эшсән**
Әсәйем минең эшсән
Кем генә булмаған ул,
Тәмле аштар бешереп,
Һалмалар йәйгән бит ул.
Икмәк тә һала белә,
Бәлештәр ҙә бешерә,
Теленде йоторлоҡ итеп
Ҡоймаҡтарҙы һикертә.
Көн һайын әсәйемә
Киләләр тегенергә.
Исең китер , кейеп алһаң
Бейеү кұлдәктәрен дә.
Көн һайын һыйыр һауа,
Тауыҡтарҙы ашата,
Мин дә йөрөйөм шунда
Ярҙам итәм тип, тышта.

**Тормоштоң ҡәҙерен бел**
Йылмайып ҡара доньяға
Йәш һәм һау саҡтарыңда,
Ауырыу,бәлә күрмәйенсә
Йәшә үҙ тормошоңда.
Бошонма һин ҡартаям тип,
Йылдар барыбер үтә,
Коштар беҙҙән осҡан кеүек
Һәр кеше осоп китә.
Тик барыбер хөр йәшә һин,
Һаулыҡ бирһен Хоҙай беҙгә
Шат йәшәргә был ерҙә!

**Хәйерле көн!**
Хәйерле көн теләйем һеҙгә , (һиңә)
Ҙур уңыштар эшегеҙҙә,
Хоҙай ярҙам итеп торһон,
Олоғоҙға кесегеҙгә.

*( Уҡытыусыһы Ғәзизова Әклимә Сәфәрғәли ҡыҙы )*

# Папа, мама, я - спортивная семья




29 ноября в нашей гимназии, в спортивном зале, прошел конкурс “Папа, мама, я - спортивная семья”, который организовал 7б класс. В нём участвовали ученики 6-7 классов.

Из каждого класса подготовлены были команды из 4 человек. Активно приняли участие родители учащихся.

Посмотреть это соревнование пришли очень много болельщиков, воспитатели и учителя. Ребята нарисовали свои плакаты, чтобы поддержать свою команду.

Конкурсы были очень разнообразные и интересные: с обручами, мячами, скакалками, оздушными шарами. Игроки сражались очень усередно и целенаправленно. Они старались не дать сопернику вырваться вперед.

В ходе мероприятия, ребята успели показать свои таланты. Кто-то играл на скрипке, на кубызе, кто-то пел, а кто - то показывал свои танцевальные способности.

После этого опять продолжилась напряженная борьба между командами. Никто не хотел сдаваться, и все боролись до конца.

В конце соревнований, пока жюри подводило итоги, ученики поздравили своих матерей с прошедшим праздником “День Матери” и подарили им музыкальный номер.

Самая напряженная и волнительная часть любого конкурса - это награждение. Каждая команда была отмечена в разных номинациях: 6 а класс как “Самая дружная семья”, 6 б - “Самая сплоченная семья”, 7 а - “Самая волевая семья”, 7 б - “Самая быстрая,ловкая,умелая”, 7в - “Самая оригинальная визитка”.

Но это ещё не всё. Также жюри объявило победителя и призеров: 1 место - у команды “Максимум” 6 а класса, 2 место - у 6б- (“Звезда адреналин”), 3 место у 7 а класса (“Ну, погоди”), которым вручили хорошие подарки.

Каждой команде, принимавшей участие в этом соревнование, также были вручены вкусные пироги.

Все участники и болельщики ушли с этого конкурса радостными и довольными, потому что они сражались не только за победу, но и немного укрепили свое здоровье.

*Эльмира Даминдарова,*
*ученица 9В класса*

---

Когда листочки ночью лунной
Так шепчутся друг с другом шумно,
Когда свет солнышка с утра
Мне говорит: «Вставать пора!»
Когда моя родная мама
Меня обнимет и прижмет.
Себя я чувствую счастливой самой.
Как жаль, что время так течет ...
Когда на улице ненастье,
Душе так холодно, темно.
И словно нет на свете счастья,
Но мысль эта - далеко.
И мне становится легко..
Когда родная моя мама,
Мне скажет, что природа наша-
Нет ничего на свете краше,
И что любая непогода -
Это не повод для невзгоды.
Как хорошо на свете жить,
Когда есть рядом теплота.
Нам жить хоть вечно, не тужить,
Когда есть мамина искра.

*Юля Шагеева,*
*ученица 10 А класс*

# Волейбол ярышы

23-24 ноябрҙә гимназиябыҙ бинаһында республика интернаттары араһында волейбол буйынса зона уйындары үткәрелде. Был ярышта барыһы 6 команда көс һынашты. Улар араһында: Республика иҡтисад лицей-интернаты, Р.Ғарипов исемендәге 1-се һанлы гимназия-интернат, Республика башҡорт лицей-интернаты, Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге республика музыка интернаты,Ҡ.А.Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты һәм алыҫ Дыуан районы ҡунаҡтары - Мәсәғүт республика лицей-интернаты егеттәре,ҡыҙҙары ҡатнашты. Бар команда ла еңеү яулау маҡсатында йыйылғандар ине.

- Мин волейбол уйнарға яратам. Ярыштарға ла йөрөү бик оҡшай, сөнки коллектив менән уйнау берҙәмлеккә өндәй. Бындай ярыштарҙа башҡа





гимназия-лицейҙарҙан килгән командалар менән танышаһың, аралашаһың, дуҫлашаһың, тәжрибә уртаҡлашаһың. Ә инде уйын барышында миңә сәм, ярыш ҡото уяна, -ти Арыҫлан Атанғолов Республика башҡорт лицей-интернаты уйынсыһы.

Ысынлап та, уйын ҡыҙыу һәм көсөргәнешле барҙы. Һәр команда үҙенсә көслө һәм еңеүгә лайыҡ. Шулай булһа ла, ярыш булғас еңеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә була. Һөҙөмтәләр шулай булды:

1-се урынға Р.Ғарипов исемендәге гимназия-интернаты командаһы, 2-се урынға республика иҡтисад лицей-интернаты, 3-сө урынға Дыуан лицей интернаты егеттәре лайыҡ булды. Ә ҡыҙҙар араһында 1-се урын Р.Ғарипов исемендәге гимназия интернаты командаһына, 2-се урын Дыуан лицей интернатына, 3-сө урын РХГИ ҡыҙҙарына бирелде. Еңеү яулаған егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы ысын күңелдән ҡотлайбыҙ.

***Ишбулатова Ынйығөл,***
***8В класы уҡыусыһы***

# IV Республиканский конкурс «Урал-батыр»

29 ноября прошел IV Республиканский конкурс юных сказителей и исполнителей башкирского народного эпоса «Урал-батыр» на иностранных языках и языках народов, населяющих Республику Башкортостан. Наши ученицы 11 а класса Эргашева Шохсуман и Ахмедьянова Дина достойно выступив, показали лицо нашей гимназии. А Эргашева Шохсуман в секции «Иностранные языки» (немецкий, французский, турецкий, вьетнамский) получила 2 место, рассказав эпос на турецком языке. И в рамках этого же мероприятия прошел конкурс на лучшую иллюстрацию, презентацию, путеводитель «По следам Урал-батыра». Наша гимназия, представившая творческий проект группы учащихся «Послание» (руководитель – Мазитова Любовь Рафаэловна), получила 1 место.

***Айзиля Мулюкова,***
***ученица 10А класса***

Гәзит 2000 йылдан башлап нәшер ителә
Тиражы: 25 экз.
Мөхәрриәт:
Мөлөкова А., Даминдарова Э.
Баш мөхәррир урынбаҫары:
Сәлихова Гүзәл Әхәт ҡыҙы
Баш мөхәррир:
Хакимйәнова Венера Салауат ҡыҙы
Верстка, дизайн:
Радионов Артур Иванович